**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башкортостандың халык шағиры**

# Тоғро юлдашыбыҙ “Ватандаш”



ХХ быуат аҙағында Башҡортостанда байтаҡ яңы баҫмалар барлыҡҡа килде. Яңы гәзит-журналдарҙың сыға башлауын уҡыусыларыбыҙ бик ҡыуанып ҡаршы алдылар. Ләкин уларға үҙҙәренең йөҙөн билдәләүе, маҡсаттарҙы асыҡлауы, йөкмәткене күҙ алдына килтереүе, авторҙар туплауы еңел булманы.

Был яңы баҫмалар араһында “Ватандаш” журналы баштан уҡ үҙенең киң ҡарашы, тәрән фекерләүе, жанр төрлөлөгө менән нығ айырылып торҙо һәм тәүге һандарынан уҡ халыҡтың ихтирамын һәм һөйөүен яуланы.

Халҡыбыҙҙың милли үҙаңы нығ үҫешкән, тарихи хәтере яңырған дәүерҙәге бик мөһим ваҡиғалар араһында 1995 йылдың июнендә үткәрелгән I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы айырыуса әһәмиәтле булды. Был йыйынға милләттәштәребеҙ бик күп илдәрҙән килгәйне. Бындағы осрашыуҙар һәм аралашыуҙар байрамға, ил хәтеренән юйылмаҫлыҡ тантанаға әйләнде. Был ҡоролтай ваҡытында иң мөһиме шул — милләтебеҙҙең хәҙерге хәлдәре, киләсәк яҙмышы тураһында пленар ултырыштарҙа ла, төрлө секцияларҙа ла бик етди һөйләшеүҙәр барҙы. Был ваҡиғаның Башҡортостан Республикаһының тарихи яңырыуындағы, халҡыбыҙҙың ижтимағи үҫешендәге, милли хәрәкәттәге әһәмиәте йылдан-йыл асығыраҡ күренә. Нәҡ бына ошо йыйында ҡоролтайҙың махсус журналын булдырыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Уның баш мөхәррире итеп академик Ғайса Хөсәйенов ҡуйылды.

Әлбиттә, Ғайса Батыргәрәй улы фән һәм әҙәбиәт өлкәһендә бай тәжрибә туплаған абруйлы, ҙур ғалим һәм яҙыусы. Ләкин журналистикала ул бер ваҡытта ла эшләмәгән, шуға журналды нисегерәк ойоштороп алып китер? Был һорау күптәрҙе һағайтмай ҡалманы. Шуныһы ҡыуандырҙы: уңған, зирәк яңы баш мөхәррир журналдың тәүге һанынан уҡ эште юғары кимәлдә башлап ебәрҙе һәм “Ватандаш” тиҙ арала күптәрҙең ятҡан журналына әйләнде.

Ҙур ғилем эйәһе Ғайса Хөсәйенов тәүҙән үк шундай талап ҡуйҙы: журнал энциклопедик йөкмәткеле булырға, ижтимағи һәм рухи үҫештең

төрлө тармаҡтарын үҙ эсенә алырға, тормоштағы иң актуаль мәсьәләләргә иғтибар итергә тейеш. Әҙәбиәттәге, мәҙәниәттәге, фәндәге эҙләнеүҙәр һәм ҡаҙаныштар, күренекле шәхестәрҙең эшмәкәрлеге, үткер мәсьәләләр тураһында фекер алышҡанда киң ҡараш һәм тәрәнлек — был һәйбәт традициялар “Ватандаш”тың сыға башлаған сағынан уҡ ойошто һәм нығыны. Һәм был сифаттар һуңғы һандарға тиклем һаҡлана.

“Ватандаш”тың бөтә һандарын бергә туплаһаң, ғәжәп бай йөкмәткеле китапхана хасил була. Был һандар яңы быуындарҙы интеллектуаль һәм рухи тәрбиәләү өсөн үҙенсәлекле мәктәп ул. Киләсәктә милләттәштәребеҙ әле үҙенең егерме йәшен тултырған “Ватандаш”тағы төрлө жанрҙағы баҫмалар буйынса беҙҙең заманды өйрәнәсәк, башҡа дәүерҙәр буйынса бик күп мәғлүмәт аласаҡ.

Рухи юлдашыбыҙ “Ватандаш” журналын беренсе һанынан башлап уҡыйым. Ошонда шиғырҙарым, мәҡәләләрем, “Рәми”, “Атлы азамат” тигән тотош китаптарымдың баҫылып сығыуы менән ғорурланам. Киләсәктә лә уның тоғро уҡыусыһы һәм авторы булып ҡалырға яҙһын.

“Ватандаш”ты уҡымай йәшәгән милләттәштәрем бик күпте юғалта. Бигерәк тә Башҡортостандан ситтә йәшәүсе башҡорттарға был журналдың һуңғы ваҡытта бөтөнләй тиерлек барып етмәүе ныҡ үкенесле.

Тормошобоҙҙа “Ватандаш” журналы һәр саҡ рухи юлдашыбыҙ, яҡын фекерҙәшебеҙ булып ҡалһын.

